рәттәре ихтыярының дошмандарын, атап әйткәндә, подполковник Башмаковты иптәштәре һәм командаһы менән аяҡ-ҡулдарын тимер менән бығаулап беҙгә оҙатырға.

Шуларҙы раҫлап, ҡул ҡуйабыҙ. Тейешле мәғлүмәт өсөн хәрби коллегияның манифесынан һәм указынан күсермәләр теркәлә.

Баш етәксе *Иван Кузнецов*.
Баш полковник *Салауат Юлай улы*[1].
Ғәскәри етәксе һәм тәржемәсе *Адил Бигашев*.
Армияның ғәскәри поход писары *Петр Лутохин*.
Ротаның поход писары *Василий Протопопов*.
1774 йыл, ғинуарҙың 21-се көнө
Салауат Юлаев. Шиғырҙар, йырҙар, рәсми ҡағыҙҙар.
Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1994.

## ТАЖЕТДИН БИНЕ ЯЛСЫҒОЛ ӘЛ-БАШҠОРДИ

### *(1767 – 1838)*

### Тарихнамә-и Болғар (Болғарҙар хаҡында тарихи яҙма)

*Ҡулъяҙманан өҙөктәр*

...Хажи Ялсығол уғлы Тажетдин үҙенең аслы[2] нәселене Әдәм Сафиуллаға васил[3] әйләдем. Тәүарих китаптарындан ҡарап, ижтиһади там[4] илән «Чынғызнамә»дән ҡарап, үземә васил әйләдем. Андин түбәндәге балаларымызны «Чынғызнамә»дән ҡарап, үземә васил әйләдем. Тарих мең дә ике йөз дә егерменче йылда, ҡуй йылында, сөнбәләдең[5] егерменче йәүмендә[6] вә маһи ғәрәбийә[7] рабиғ әл-ахыр[8] айында ирде. Бу бәндәи әхҡәр[9] бу рисаләне төҙөп, бу рисаләгә «Тәуарихи Болғарийа» аты бирдем. Әммә без нәҡел ҡылдыҡ[10] китапларның

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 427, 52 – 53-сө биттәрҙең ике яғы. – Төп нөсхә. «Документы ставки Е. И. Пугачева, повстанческих властей и учреждений» тигән китаптан башҡортсаға тәржемә итеп алынды, док. № 365.
[2] *Аслы* – башланғыс, сығыш.
[3] *Васил* – тоташыу.
[4] *Ижтиһад там* – ныҡлап тырышыу.
[5] *Сөнбәлә* – август айы.
[6] *Йәүмендә* – көнөндә.
[7] *Маһ ғәрәбийә* – ғәрәп йыл атамаһы.
[8] *Рәбиғ әл-ахыр* – дүртенсе ай ахырыһы.
[9] *Бәндәи әхҡәр* – түбән урын тотҡан кеше.
[10] *Нәҡел ҡылыу* – күсереү, тәржемә итеү.



исемләре булардыр: «Тәуарихи дәуаир» лил-имами Тәбриз әл-Йунани, вә «Тәуарихи Фәрһаң» лил-имами[1] әт-Туси, вә «Тәуарихи һирмиз» лил-имами әл-Чәләби, вә «Тәуарихи Рәүзат әс-Сафа» лил-имами әл-Чағми, вә «Тәуарихи Касфарани» лил-имами әт-Тәбризи, вә «Тәуарихи жәмасиб» лил-имами әт-Таrази, вә «Тәуарихи әл-Чәләби» лил-имами әл Бәғәуи-сәхиб[2], китаби «Мосабих».

Бу ҡәдәр китаплардан ҡарап, исбат әйләдек, Чингиз хан хоружына[3] дикән[4]. Андин түбән бабаларыларымызны «Чынғызнамә»дән ҡарап вә һәм күпне күргән мәшәйехләрдән[5] ишетеп, вә бабаларыбызның яза килгән намәләрен[6] юлығып, бу рисаләгә язып, Әдәм пәйғәмбәрә[7] васил әйләдем вә мәшәйехләрдән ишеттекем вә яздыҡларны[8] үҙ занымызда[9] хәбәр мәшһүрдер вә хәлаи[10] башҡорт тайфалары[11] һәм бер ҡабаил[12] вә шағубын[13] шул исемләр берлән йөрөйләр, йәғни бабаларымызның исемләре берлән әйтәләр. Бәс[14]. Мондаҕ булса, хәбәре мәшһүр булды вә һәм мөтәуатир[15] булды.

...Әүвәлән[16] Ғәбд әл-Харис вә һуuа[17] Әдәм Сәфиулла әймешләр. Әдәмнең ғүмере бең[18] йыл улды. Аның һабитынан[19] хәзрәт Рәсүлулла ахыр заманына киләнчә[20] дүрт бең өч йөз ҡырк йыл улды, диләр. Вә бәғзеләр: биш бең туҡыз йөз етмеш ике йыл, диләр вә бәғзеләр: илле бең йөз утыз йыл, диләр. Әммә әсаһ[21] риуайәт китап тәфасирның[22] әҡсарында[23] ете бең

[1] *Лил-имами* – имамдың.
[2] *Сәхиб* – эйә, хужа.
[3] *Хоруж* – килеп сығыу.
[4] *Дикән* – тиклем.
[5] *Мәшәйех* – дин ғалимы.
[6] *Намә* – китап, яҙма.
[7] *Пәйғәмбәрә* – пәйғәмбәргә.
[8] *Яздыҡ* – яҙыу.
[9] *Зан* – уй, фекер.
[10] *Хәлаи* – йәйләүҙәге өй; иркенлек, сәхрә.
[11] *Тайфа* – ҡәбилә, төркөм, йәмәғәт.
[12] *Ҡабаил* – ҡәбиләләр.
[13] *Шағуб* – халыҡ, төркөм.
[14] *Бәс* – фекер йәки һөйләмдең тамамланыуын белдергән һүҙ.
[15] *Мөтәуатир* – киң билдәле.
[16] *Әүвәлән* – иң элек.
[17] *Һуuа* – ул.
[18] *Бең* – мең.
[19] *Һабит* – һауанан ергә төшөү.
[20] *Киләнчә* – килгәнсә.
[21] *Әсаһ* – иң дөрөҫ аңлатма.
[22] *Тәфасир* – һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатып биреү.
[23] *Әҡсар* – күп осраҡта.

йылдыр. Фәтүә[1] бының үзләрендәдер, нитәк[2] ки хәдис[3] сәхихендә[4] килмештер.

...Әдәм гәмде[5] Шәйес дәфен әйләде[6]. Кәберендә ихтилаф[7] итмешләр: бәгзеләре Һиндостанда Сәрәндиб тағында, диләр вә бәгзеләре Мәккәдә Әбү-Кәббәс тағында[8], диләр. Әдәм гәм вафатындан суңра анабыз Һауа бер йыл хәйәт[9] улды. Андин суңра Шәйес аны Әдәм янына дәфен әйләде. Бәгдә[10] туфанда Нух гәлиәссәләм адарны, ердән табутлары илән чығарып, кәмәгә ҡуйды. Туфандин суңра әл-Мөҡәддәс ерендә Хәлил әр-рахман дәфен әйләде. Шәмдәй ҡәберләре андадыр.

Өдәм Сәфиулладин Шәйес туғды. Шәйес ... туғыз йөз ун йыл ғүмер сөрдө. Һиндостанда дәфен улынды. Андин Ануш туғды... Мәглүм тәуарих китапларында безгә төп ата кече уғлы Мәрүәндер. Мәрүәндән безгә силсилә[11] килмештер. Әммә Мәрүән Бәдәхшанда ике йөз йыл ғүмер сөрдө: батша улды, кафыры вә мосолманы мәглүм дәгелдер[12]. Бәдәхшанда дәфен улынды. Мәрүәндән Әфләйүн туғды... Тағланыштан Әфләк туғды. Бу Әфләк ҡырғыз халҡының аслы[13] вә бәньядыдыр[14]. Мәргәнән мәргәйә[15] күчеп йөрөмәк андин ҡалды. Йөз ун йыл ғүмер сөрдө. Сырдарьяда ғарыҡ улды[16]. Кафыры вә мосолманы мәглүм дәгелдер. Андин Мәрд туғды. Бу Мәрд төркмән халҡының атасыдыр. Андин чуҡ[17] уғыллар туғды. Олуғ уғлы Төркмән, андин кечесе Ҡуңғырат, андин кече Бөрйән, андин кече Манғыт, андин кече Кәрже, андин кече Ҡыпчаҡ, андин кечесе Юрматы, андин кече Ҡараҡалпаҡ. Бу заманларда халайыҡларның[18] әймәге[19] буларның нәселендәндер. Мәрднең ғүмере вә милләте мәглүм дәгелдер.

[1] *Фәтүә* – шәриғәткә нигеҙләнгән хөкөм.
[2] *Нитәк ки* – шул рәүешле кеүек.
[3] *Хәдис* – Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең ауыҙынан сыҡҡан һүҙҙәр.
[4] *Сәхих* – дөрөҫ, ысынға тура килеү.
[5] *Гәм* – «гәлиәссәләм» һүҙенең ҡыҫҡартылған формаһы.
[6] *Дәфен әйләү* – мәйет күмеү, ерләү.
[7] *Ихтилаф* – ҡапма-ҡаршы фекер, аңлашыу.
[8] *Таг* – тау.
[9] *Хәйәт* – тереклек, ғүмер.
[10] *Бәгдә* – һуңынан, аҙаҡ.
[11] *Силсилә* – сылбыр.
[12] *Дәгел* – түгел.
[13] *Аслы* – төп, тамыр, нигеҙ.
[14] *Бәньяд* – ырыу башы, нигеҙ һалыусы.
[15] *Мәргә* – көтөү йөрөтөү урыны, көтөүлек.
[16] *Ғарыҡ улыу* – һыуға батып үлеү.
[17] *Чуҡ* – күп.
[18] *Халайыҡ* – халыҡтар.
[19] *Әймәк* – аймаҡ.



Төркмәндин Кәнжә туғды. Әммә бу Кәнжә Ғайса динендә ирде. Бохараны ул бина әйләде. Ғүмере туҡсан йылдыр. Бохарада дәфен улынды. Бу Кәнжәдән чуҡ уғыллар туғды. Олуғ уғлы Татардыр, андин кечесе Мишәрдер, андин кече Иштәктер, андин кече Нуғайдыр. Булар һәр бере шаһ улып, атрафи ғаләмдә[1] урдалар бина әйләмешләр[2]. Халайыҡларның әймәге анларның нәселендин хәбәр бирмәктер.

Бу Кәнжәнең уғландарындин безгә нәсел баба Иштәктер. Әммә бу Иштәк камил ир ҡупты, кәгбәйә[3] варды[4]. Чуҡ-чуҡ тәуәләр ҡорбан әйләде. Тәурәт[5] вә Инжилне[6] камил белер ирде. Ғилемлектә нәзире[7] юҡ ирде.

Бу Иштәктин чуҡ уғланлар булды. Төп йорто Амударьясында ирде. Олуғ уғлы Тамьян, андин кечесе Үсәргәндер, андин кечесе Күбәләк, андин кече Бәкәтун, андин кече Сарт, андин кечесе Тырнаҡлы, андин кечесе Түбәләс, андин кече Дыуандыр. Бу халайыҡларның хәбәр бирмәге[8] анларның нәселендиндер.

Әммә бу Иштәк уғланларындин безгә баба Бәкәтун гәйәт үфкәле[9] әдәм ирде. Ерне ташлап, бәләди шимал[10] тарафындин барып, Миәс дарьясына килде. Анда мәкам әйләп[11], туҡсан йыл ғүмер әйләде. Аның уғланлары чуҡ улды. Олуғ уғлы Әйледер, андин кечесе Юрмый, андин кечесе Байлар, андин кечесе Байҡы, андин кечесе Ирәкте, андин кечесе Салжут. Бунлар һәр бересе шаһ улып, атрафи ғаләмгә йәйелделәр. Халайыҡларның хәбәр бирмәге анлар нәселендиндер.

Безгә төп баба олуғ уғлы Әйледер. Әммә Бәкәтун нәсрани[12] динендә ирде. Әммә Әйле төп ата йортонда ҡалмыштыр, илле йыл шаһ улып, Миәс дарьясында туҡсан туғыз йыл ғүмер сөрөп, вафаты анда улды...

Аның (Туҡи хандың) дәүерендә болғар халҡы мәжүсиләр ирмеш... Тарихи һижрәтнең туғызынчы йылында (Туҡи хан улы) Айдар хан тәхеткә кичте[13]. Пәйғәмбәр гәм әсхәбләрендин

[1] *Атрафи ғаләм* – бөтә тарафтар.
[2] *Бина әйләү* – төҙөү, һалыу.
[3] *Кәгбә* – Мәккәләге мосолман ғибәҙәтханаһы.
[4] *Варыу* – барыу.
[5] *Тәурәт* – йәһүттәрҙә Муса пәйғәмбәр китабы.
[6] *Инжил* – христиандарҙың дини китабы.
[7] *Нәзир* – оҡшаш, тиңдәш.
[8] *Хәбәр бирмәк* – берәй нәмә тураһында хәбәрҙар.
[9] *Үфкәле* – үпкәле, үпкәсел.
[10] *Бәләди шимал* – төньяҡтағы ил.
[11] *Мәкам әйләү* – йәшәү, ғүмер һөрөү.
[12] *Нәсрани* – христиан.
[13] *Кичте* – ултырҙы.

7 – 1.0159.06

өч кемсәнәне[1] ихтыяр итеп[2], дәғүәт[3] өчен Болгарға ебәрмеш. Ул әсхәбләрнең берессе Ғәбдеррахман бине[4] Зөбәйер, икенчесе Хантыл бине Рабиғ, өчөнчөсө Зөбәйер бине Җәгдә. Бәгдә пәйғәмбәр ғәм бу өч әсхәбне ебәрмештә димеш ки:[5] «Мин сезгә өч нәрсә бирдем. Сездин кәрәмәт ҡылыуыңызны сорасалар, бу өч нәрсәдин истимдад итәрсез[6]». Бере дәуат[7] – Зөбәйергә бирде, вә бере таяҡ – Хантылға бирде вә бере дәстар[8] – Ғәбдеррахманға бирде.

Чүн бунлар Болғарға килделәр. Үзләрене табиб сүрәтендә ҡылып, табибчылыҡ[9] ҡылыр ирделәр. Нә ҡәдәр хәстә[10] сөкәл[11] бар исә – барчалары шифа табыр ирделәр.

Әл-ҡисса[12], бер көн Айдар ханның ҡызына ғәлләти фалиж[13] пәйдә булды[14]. Нә ҡәдәр табибләрдин шифа эстәде[15] – сихәт тапмады, ғажиз[16] ҡалды. Бер көн вәзирләре эчендин Бураж атлығ[17] вәзире бар ирде. Әйтте: «Әй ханым! Йәшең озаҡ булсын! Һезнең шәһәр эчендә өч ғәрәп бардыр, табиблыҡта нәзирләре[18] юҡтыр. Бу ҡызның зәхмәтенә[19] дәрман[20] табырлар. Әммә динләре безнекенчә дәгелдер», – диде. Чүн[21] вәзир бу сүзне әйткәндин өтрү[22] хан бойордо, ғәрәпләрне өндәделәр[23].

Әл-ҡисса, сәхәбәләр килделәр, сәләм бирделәр. Хантыл бине Рабиғ хәзрәтләре төрки вә рум[24] теленә бинәзир[25] остад

---

[1] *Кемсәнә* – кеше, әҙәм.
[2] *Ихтыяр итеү* – һайлап алыу.
[3] *Дәғүәт* – саҡырыу, өндәү.
[4] *Бине* (йәки «ибн») – улы.
[5] *Ки* – тултырыусы һөйләм алдынан ҡулланыла торған бәйләүес.
[6] *Истимдад итеү* – ярҙам һорау.
[7] *Дәуат* – ҡара һауыты.
[8] *Дәстар* – сәллә.
[9] *Табиб* – врач.
[10] *Хәстә* – ауырыу.
[11] *Сөкәл* – ауырыу кеше.
[12] *Әл-ҡисса* – шулай итеп.
[13] *Ғәлләти фалиж* – ҡаты ауырыу.
[14] *Пәйдә булыу* – барлыҡҡа килеү, килеп сығыу.
[15] *Шифа эстәү* – шифаланыу, дауаланыу.
[16] *Ғажиз* – көсһөҙ, хәлһеҙ.
[17] *Атлығ* – исемле.
[18] *Нәзир* – тиңдәш, оҡшаш.
[19] *Зәхмәт* – ауырыу, сир.
[20] *Дәрман* – дарыу.
[21] *Чүн* – шулай итеп.
[22] *Өтрү* – яуап итеп.
[23] *Өндәү* – саҡырыу.
[24] *Рум* – грек.
[25] *Бинәзир* – тиңдәшһеҙ.



ирде вә һәм хафиз кәләмулла[1] ирде. Хан әйтте: «Әй, ғәрәпләр, ҡандин[2] килерсез?» Хантыл әйтте: «Мәдинәдин килермезләр». Хан әйтте: «Ни эзләп йөрөйсөз?» Хантыл әйтте: «Табиблыҡ ҡылырмызлар». Хан әйтте: «Бәнем бер ҡызым бардыр, ете йылдин бирле хәстәлер. Уға дәрман табарсызмы?» Хантыл әйтте: «Зәхмәтне күрәйлек[3]». Чүн зәхмәтне күрделәр. Әйттеләр: «Бу фалиж зәхмәтедер. Буна шәжәрәи сарбан[4] япрағы кирәктер», – диде. Хан әйтте: «Сарбан нә агачтыр?» Хантыл әйтте: «Ҡайын ағачылыр». Хан әйтте: «Бездә ул ағач юҡтыр». Чүн ҡайын япрағын килтерделәр. Хантыл әйтте: «Бу иске ҡайын япрағыдыр. Безләргә ағачынан яңы алған кирәктер», – диде. Хан әйтте: «Ҡыш көнөндә аны ҡандин тапмаҡ кирәк?» – диде. Хантыл әйтте: «Инша Алла Тәғәлә[5], аны без табырмыз. Мәгәр шул шарт илән[6]: безнең динебезгә иман килтерсән», – диде. Хан әйтте: «Әгәр яңы ҡайын япрағы тапсаңыз, вә ҡызым сихәт булса, ислам диненә керермен», – диде.

Әл-кисса, бу әсхәбләр пәйғәмбәр ғәлиәссәләм биргән дәуатны ергә ҡуйды вә таяҡны дәуат эченә ҡадап ҡуйдылар. Хәзрәт Ғәбдеррахман бине Зөбәйер пәйғәмбәремез биргән дәстарын кейеп, ике рәкәғәт[7] намырз ҡылды. Бу ике сәхәбә: «Амин![8]» – диделәр. Баяғы таяҡ, үсеп, бер кечкерәк чәуел булды. Хан өйөнөң тамына[9] иреште; ботаҡланып, япраҡланды. Йыйып, дүркә[10] бөгләп[11], ҡызны хаммамға[12] керетеп чаптадылар.

Фи-л-хали[13] ҡыз сихәт булып, өйөнә килде. Хан, бу хәлне күреп, иман килтерде. Андин Бураж вәзир, андин ғәйре вәзирләр вә ҡалан[14] шәһәр халҡы – барчалары иман килтерделәр. Мәчет жамиғ[15] бина әйләделәр. Хәзрәт Зөбәйер бине Жәгдә имам булып, пәйғәмбәр ғәм вирдеке[16] таяҡҡа таянып, хөтбә[17] уҡыды.

---

[1] *Хафиз кәләмулла* – Ҡөрьәнде яттан белеүсе.
[2] *Ҡандин* – ҡайҙан.
[3] *Күрәйлек* – күрәйек.
[4] *Шәжәрәи сарбан* – ҡайын ағасы.
[5] *Инша Алла Тәғәлә* – Алла Тәғәлә ҡушһа.
[6] *Илән* – менән.
[7] *Рәкәғәт* – намаҙҙың аяғүрә тороу, эйелеү һәм башты ергә терәүҙе эсенә алған өлөшө.
[8] *Амин* – шулай булһын.
[9] *Там* – тәңгәл, тапҡыр.
[10] *Дүркә* – миндек.
[11] *Бөгләү* – бәйләү.
[12] *Хаммам* – мунса.
[13] *Фи-л-хали* – үҙ хәлендә, үҙ көсөндә.
[14] *Ҡалан* – ҡалған.
[15] *Жамиғ* – йома уҡыла торған мәсет.
[16] *Вирдеке* – биргән.
[17] *Хөтбә* – вәғәз.

Ул заманда, тарихи һижрәт[1] 12-нче йылында, ҡуй йылы, борж хутның[2] 26-нчы көнөндә, рамазан[3] мөхәррәмнең[4] 12-нче көнөндә сәхәбәләр болгар халҡыны мосолман әйләделәр. Ул өч әсхәб Болгарда ун йыл ҡалдылар. Мәдрәсә бина ҡылдылар. Халайыҡҡа тәғлим бирделәр[5]. Андин суң Ғәбдрахман бине Зөбәйер вә Зөбәйер бине Җәгдә һәр икесе Мәдинәгә киттеләр. Хантыл Болғарда ҡалды. Баяғы хәстәдин терелгән ҡызны никах әйләде[6]. Рузгардин суң Хантыл бине Рабиғ вафат улды. Андин Мөхәммәт-Әмин хан туғды. Көллөсө «Тәуарихи һирмиз» лил-имам әл Чәләбидин күчерелгән...

Аның (Илһам ханның) заманында Чыңгыз хан хоруж әйләде. Барча ханлар аңа барып, бәйғәт бирде. Халыҡ-ара тамға салдырмаҡ, оран бирмәк андин ҡалды. Мондин түбән яд булынған[7] бабаларымыз «Чыңғызнамә» дин мәғлүм булыныр. Илһам хандин Ғабдулла хан туғды. Илле йыл Болғарда хан улды. Аҡсаҡ Тимер Болғарны харап әйләде,[8] нам-нишан[9] ҡуймады. Ғабдулла ханны һәм үлтерде. Андин ике уғыл ҡалды: бере Ғалимбәк вә бере Алтынбәк. Безгә баба Ғалимбәктер...

Андин (Мирхажиҙан) Ҡолғәли туғды. Харезм китеп, анда ҡырҡ биш йыл мөдәрис улып, ахыры Туси дидеке хаким Хитай йортондин ғәскәр илән Ибне Хажипны үлтермәк өчен килде. Чөнки Насретдин әт-Тусиның тәсниф ҡылған[10] бик олуғ китапны Ибне Хажип рәхмәтулла ғәлийә даръяға атмыштыр, әғжәбене[11] шелбә[12] димештер. Туси шаһ ҡатмыштыр. Суңра Насретдин әт-Туси Хытай шаһына сыйынып, ғәйрәт берлә килеп, Ибне Хажипны тунатмыштыр, әғжәбене тәдби[13] димештер... Харезмны харап әйләде. Ибне Хажипны үлтерде. Даръяның икенче яғына чыгып ҡалған кемсәнәләр бер шәһәр бина әйләделәр. Атыны Үргәнеч ҡуйдылар. Ҡолғәли шул мәһләкәдә[1] ҡачып ҡырғыз халҡына килде. Андин ҡачып, атасы йорто Зәй тамағына килде. Өч йыл мөрүрендин кезин[2] Зәй тамағына Субай хан заманында бер аждаһа беленде. Зәй тамағы халҡы аждаһадин ҡачып, Чирмешән тамағына бер шәһәр бина әйләделәр. Атыны Бүләр ҡуйдылар. Ҡолғәли анда әфәнде Аҡсаҡ Тимер мәһәликесенә тамам йөз ун йыл ғумерендә вафат булды. Ибне Хажипның остазы ирде...

Әй сыуының башында бер түбә бардыр. Ул Сәйдәш ханның йортодор. Бу Сәйдәштин ике уғыл туғды: бере Тыныш вә бере Ҡуштаймас. Тыныш илән Ҡуштаймас икесе бер анадин ирде. Ҡараҡалпаҡ ханиның ҡызындин уғыл-ҡыз ҡалмады. Бу ике уғылның аналары Әйле оруғындин ирде. Әйле оруғының нәселе бу ике икәүдиндер. Тыныш – Алтмышҡолаҡ әйлеседер, Ҡуштаймас – Ҡоми әйлеседер. Буларның вәжесе[3] тәсмиәләрен[4] Әчтерхан йортонда йөрдәкөмдә Кубан халҡына бардым. Бер ҡартта ҡунаҡ булдым. Сөәл ҡылды: «Сән, мулла егет, нә ерлек фәрзәндесең?[5]» Бән әйттем: «Болғарлыҡ иштәкмен», – дидем. Ҡари[6] әйтте: «Ҡанҡы[7] оруғлыҡсың?» – диде. Бән әйттем: «Әйле Оруғымын», – дидем. Ҡари әйтте: «Алтмышҡолаҡмысын йә Ҡомимысын?» – диде. Бән әйттем: «Белмәйем, әммә атамдин ишеттем: әйлемен дип». Ҡари әйтте: «Тынышмысын йәки Ҡуштаймасмысын?» – диде. Бән әйттем: «Тынышмын». Ҡари әйтте: «Бабаң Сәйдәш ауға чыҡҡанда утыз болан атмыш. Аның ҡолаҡларын уғырлап, бабаң Тыныш йәшермеш. Шул йәһәттин Тыныш бабаңны «Алтмышҡолаҡ әйлесе» дирләр. Йәнә Ҡуштаймас бабаң Сәйдәш берлән ауға чыҡҡанларында дүрт кондоз үлтермеш. Аның бересен уғырлап ҡомға күммеш. Шуның өчөн аны һәм аның оруғыны «Ҡоми әйлесе» дирләр имеш», – диде. Бән Ҡариның даналығына[8] хайран ҡалдым. Сад һәзар[9] афаринлар уҡыдым.

Безгә төп баба Тыныштыр. Бу Тыныштин ике уғыл туғды: бере Көләй, бере Ҡошчо. Бу ике уғылдин халайыҡлар йәйелде...

---

[1] *Һижрәт* – күсеү (бында Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең Мәккәнән Мәҙинәгә күскән йылы).
[2] *Борж хут* – зодиак тамғалары буйынса 22 февралдән 22 мартҡа тиклемге ваҡыт.
[3] *Рамазан* – ай календары буйынса туғыҙынсы ай.
[4] *Мөхәррәм* – хөрмәтле.
[5] *Тәғлим биреү* – уҡытыу, белем биреү.
[6] *Никах әйләү* – өйләнеү, никахланыу, уға буйһоноу.
[7] *Яд булыу* – хәтергә алыу.
[8] *Хараб әйләү* – емереү, баҫып алыу.
[9] *Нам-нишан* – исем, дан, шөһрәт.
[10] *Тәсниф ҡылыу* – яҙыу, ижад итеү.
[11] *Әғжәб* – бик ғәжәп.
[12] *Шелбә* – килбәтһеҙ, мәғәнәһеҙ.
[13] *Тәлби* – эйәрсен.

[1] *Мәһләкә* – ҡурҡыныслы урындар, һуғыш-ҡыйралыштар.
[2] *Өч йыл мөрүрендин кезин* – өс йыл үткәндән һуң.
[3] *Вәже* – сәбәп.
[4] *Тәсмийә* – кушамат биреү, исемләү, атау.
[5] *Фәрзәнд* – ир бала, сабый бала; нәҫел.
[6] *Кари* – карт.
[7] *Канҡы* – кайһы.
[8] *Даналыҡ* – уҡымышлылыҡ, белемлелек.
[9] *Сад һәзар* – меӊ тапҡыр.

Мәмһәтколдин мулла Ялчығол туғмыштыр. Әй дарьясы илән Арша дарьясы арасында Ҡормаш-йылға ауылында тереклек әйләмеш[1]. Ғүмеренең ахырында хаж талабын салып, бән, уғлы Тажетдин берлән Әчтерхан йортонда тордоҡ. Андин Дағстанға бардыҡ. Андин Диярбәкергә бардыҡ. Ул заманда бән фәкир Тажетдин ун өч йәшемдә ирдем. Диярбәкердә бәне бер хужа алдына биреп китте. «Ходай өчөн бу уғланчыкны әфәнделәргә биреп, тәхсили ғилем[2] кылсын», – дип. Атамыз Ходжаж әл-мөслимин[3] бердән хаж китте.

Бән, фәкир Тажетдин, атам мулла Ялчығолно ун дүрт йыл көттөм. Ул дүрт йыл эчендә бән әнуағ ғилем[4] фәнүн[5] илән мансыф[6] улдым. Ахир әл-әмер Диярбәкердәге мөрәбби[7] хужам донъядин үтте. Бән атамны эстәйү[8] Стамбулға бардым. Стамбулда мәчет Әхьяда атамны күрдем. Ул ходжаж илә рабиғ әл-әүәлнең[9] ахры пәнжәшәнбесендә[10] Стамбулға кермеш. Бән иртәсендә йома көнө кердем. Бәне күргән заманда уғлы ирдеке икәнне белмәде. Бән белдем. Бәндин сөәл кылды: «Нә ерлек фәрзәндесең?» – дип. Бән әйттем: «Болғарлыҡ иштәкмен», – дидем. Шул заман һушы китеп йығылды. Хушына килде: «Тажетдин, синме?» диде. Әйттем: «Бәли[11], чикерғошоң[12], мәнғим[13]», – дидем. Йәнә аһ ороп, аҡылы башындин китте. Мәчет әһле[14], яранлар[15] хайранға ҡалдылар. Шул ахшам[16] өч мәртәбә һушы китте.

Стамбулда ике йыл тордоҡ, Әхмәт әфәнде тәрбиәсендә тордоҡ. Андин карауан илән Хажитарханға килдек, анда бер йыл тордоҡ. Андин карауан илә Мәскәүгә килдек, алты ай Мәскәүдә тордоҡ. Андин Мәкәрийә ҡәлғәсенә[17] килдек, анда өч йома тордоҡ. Андин Ҡазан шәһәрендә ике ай тордоҡ. Ҡазан-

[1] *Тереклек әйләү* – йәшәү, тороу.
[2] *Тәхсили ғилем* – ғилем өйрәтеү, белем биреү.
[3] *Ходжаж әл-мөслимин* – хажға барыусы мосолмандар.
[4] *Әнуағ ғилем* – фәндең төрлө төрҙәре.
[5] *Фәнүн* – фәндәр.
[6] *Мансыф* – ғәҙел, дөрөҫ.
[7] *Мөрәбби* – тәрбиәсе, ҡараусы.
[8] *Эстәйү* – эҙләп.
[9] *Рабиғ әл-әүәл* – ай календарындағы дүртенсе ай исеме.
[10] *Пәнжәшәнбе* – кесаҙна.
[11] *Бәли* – эйе, шулай.
[12] *Чикерғош* – сыйырсыҡ.
[13] *Мәнғим* – ашатыусы, изгелек күрһәтеүсе.
[14] *Әһел* – халыҡ, кешеләр төркөмө.
[15] *Яран* – дуҫ-иш.
[16] *Ахшам* – кис, әңер.
[17] *Ҡәлғә* – крепость, нығытма.



дин Троиски шәһәренә ҡырҡ сум илә ат әжәригә[1] алып, ямщиклар берлән чыҡтыҡ. Ҡазандин чыҡкан көн атамыз хажи мулла Ялчығол: «Башым ағрыйдыр[2]», – диде вә дәхи[3] әйтте: «Әй, балаҡайым, Әй дарьясыны ахры күрмәмдер», – диде. «Ҡачан бән донъядин үтсәм, бәнем ҡәберемне ғариб[4] итеп ташлап, бәнем ҡәберем атрафындин[5] йыраҡ китмәгел, шул урында йорт-ер әйдәгел вә дәрес әйткел йә дәресне әгәрчә күздән ҡалсаң да әйткел вә һәм йылына ике мәртәбә бәнем ҡәберемә зыярат иткел[6]. Бу шартларымны еренә килтерсән, бән сәндин хушнудым[7]», – диде. «Әгәр бивафаҡ[8], бән сәндин әбдан[9] рази дәгелмен», – диде. «Һәм бынан ғәйре васыятларым бардыр», – диде. «Сандыҡ эчендә дәфтәремне табырсың», – диде.

Әл-ҡисса, без Ҡазан шәһәрендин чығып, бу яҡка килдек. Юлымыз Мамадыш өйәзенә уғрады[10]. Урта Сөн дидеке ауылға еткәнебездә әжәл иреште, донъядин үтте, алтмыш биш йәшендә рәжәп[11] айында, әүәлге йоманы рәғаиб[12] киче дирләр. Шул кичтә Жәүзәдең[13] 24-нче йәүмендә[14], тарихи һижрәтнең 1200 йылында, куй йылында ирде…

Мулла Ялчығол хәзрәттин Тажетдин мөдәррис туғмыш. Мулла Тажетдин мөдәррис Зәй сыуының Ҡызыл Чапчаҡ ҡәрйәсендә[15] мөдәррис улып тереклек әйләмеш. Ул Тажетдин фәкирдин дүрт уғыл туғды, өч ҡыз туғды. Олуғ уғлым Баһаүетдин Күперле ҡәрйәсендә мәншүр[16] илә имам[17] улып, анда тереклек әйләде. Андин кечесе Жәләлетдиндер. Мәлем ҡәрйәсендә атасы хозурында[18] хезмәт итеп һәм мәзкүр ҡәрйәдә мәншүр илә имам улып, тереклек әйләмеш. Андин кечесе

[1] *Әжәри* – аренда.
[2] *Ағрыу* – ауырыу.
[3] *Дәхи* – тағы, йәнә.
[4] *Ғариб* – ят, сит.
[5] *Атраф* – тарафтар.
[6] *Зыярат итеү* – ҡәберлектә килеп тәбрикләү.
[7] *Хушнуд* – риза, ҡәнәғәт.
[8] *Бивафаҡ* – килешмәү.
[9] *Әбдан* – бөтөнләй, һис.
[10] *Уғрау* – барыу, йүнәлеү.
[11] *Рәжәп* – ай йылы календары буйынса етенсе ай.
[12] *Рәғаиб* – рәжәп айының беренсе йомаһындағы дини байрам кисәһе.
[13] *Жәүзә* – ҡояш йылының өсөнсө айына тура килгән зодиак тамғаһы.
[14] *Йәүм* – көн.
[15] *Ҡәрйә* – ауыл.
[16] *Мәншүр* – указ.
[17] *Имам* – кешеләрҙе үҙенә эйәртеп намаҙ уҡытыусы мәхәллә башлығы, өлкән мулла.
[18] *Атасы хозурында* – атаһы алдында, атаһы бар саҡта.

Шәрәфетдиндер. Ул һәм Мәлем ҡәрйәсендә тереклек әйләмештер. Андин кечесе Ғосаметдиндер. Ул һәм ҡәрйәсендә тереклек әйләмештер. Олуғ ҡызым Биби-Нәфисә, андин кечесе Ғәзизә, андин кечесе Биби-Йәмиләдер. Баһауетдин мулладин дүрт уғыл туғмыштыр:[1] олуғ уғлы Камалетдин, андин кечесе Ғималетдин, өчөнчөсө Фәхретдин, дүртенчесе Борһанетдиндер. Жәләлетдин мулладин бер уғыл туғмыштыр, исеме Ғәбдешшөкөрдер...